**Башҡорт теленән берҙәм дәүләт имтиханы**

**01 – се вариант**

Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теленән имтихан 40 һорауҙан тора, 1-се өлөштә (А) 31 һорау бирелә. Һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә. Шуларҙың береһе генә дөрөҫ.

2-се өлөштә (В)8 һорау бирелә. Уларға ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.

3-сө өлөштә бер задание бирелә - йөкмәткеһе буйынса ҙур булмаған инша яҙырға ҡушыла. Инша махсус бланкта яҙыла.

Яуаптарҙы асыҡ, матур яҙығыҙ. Имтихан һорауҙарына яуап биреү өсөн 3 сәғәт (180мин.) ваҡыт бирелә. Эштәрҙе бирелеү тәртибендә үтәргә кәрәк. Ваҡытты экономиялау өсөн яуап бирә алмаҫтай һорауҙы ҡалдырып тороғоҙ һәм икенсе һорауға күсегеҙ. Бөтә 40 һорауға ла яуап биргәс, был һорауҙарға кире урап килергә мөмкин. Ваҡытты дөрөҫ бүлергә кәрәк: А – 31 – 45 минут, В – 8 – 45 минут, С – 90 минут.

Дөрөҫ яуап ҡатмарлылығына ҡарап бер йәки бер нисә балл менән баһалана. Бөтә эштәр өсөн ҡуйылған балдар ҡушыла. Күберәк һорауҙарға яуап биреп, күберәк балл йыйырға тырышығыҙ.

Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ!

**1- се өлөш**

**А1 – 31** эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлы яуаптар бланкыһында шаҡмаҡҡа һеҙ һайлап алған яуапҡа тап килгән һан эргәһенә «х» тамғаһы ҡуйығыҙ.

**А1.Составында нәҙек һуҙынҡылары булған һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1)мөһабәт 3)үрмәксе
2)йыһан 4)әхлаҡ

**А2.Ҡайһы яңғыҙлыҡ исемдең яҙылышы дөрөҫ түгел:**

1) «Сибай» совхозы 3) «Аманат»журналы
2)Өфө ҡалаһы 4)Сулпан балалар театры

**А3.Бәйләү юлы менән яһалған ҡушма исемде билдәләгеҙ:**

1)малҡай 3)тимер юл
2)китапты 4)баһадир

**А4. Үҙ аллы һүҙ төркөмөн билдәләгеҙ:**

1)һан 3)бәйләүес
2) киҫәксә 4)мөнәсәбәт һүҙ

**А5. Башҡарылыу бәйләнешен билдәләгеҙ:**

1)күҙгә күн 3)сәхнә түре
2)самолетҡа ултырыу 4)өс китап

**А6. Эйәлек килеш һәм эйәлек зат менән бирелгән һүҙбәйләнеште билдәләгеҙ:**

1)яҡты сырай 3)студент күндәлеге
2)мажаралы йәй 4)Ватанды һөйөү

**А7. «Фонетика» бүлегенә ҡараған һүҙҙе билдәләгеҙ:**

1)тел 3)эйәрсән киҫәк
2)һуҙынҡы 4)һүҙбәйләнеш

**А8. «Синтаксис» нимәне өйрәнә:**
1)тыныш билдәләренең ҡуйылышын
2)һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын
3)һүҙҙәрҙең мәғәнәһен
4)һүҙбәйләнеш һәм һөйләм конструкцияһын

**А9. Ҡарлуғастар һүҙендә баҫымлы ижекте билдәләгеҙ:**
1)ҡар- 3) - ғас
2) -лу 4) - тар

**А10. Асыҡ ижекле һүҙҙе билдәләгеҙ:**
1)тар - тай 3)ҡа - ра - ма
2)күр - кә 4)пар - та - нан

**А11.Ҡайһы юлдарҙа омографтар бар?**
1)иш, төш 3)ҡара, йәшен
2)туҡ ай, туғай 4)шеш

**А12. Түбәндәге төшөнсәгә аңлатма бирегеҙ. Эпентеза - ул:**
1)һуҙынҡы өндәр һүҙҙең алдында ҡуйылһа
2)һуҙынҡы өн һүҙ башындағы ике тартынҡы өндөң араһына ҡуйылһа

3)ике һүҙ араһында бер һуҙынҡы юғалһа
4)баҫымлы ижектәрҙә һуҙынҡы өндөң көсһөҙләнеүе йә юғалыуы

**А13. Морфологик һүҙьяһалышҡа ҡараған һүҙҙәрҙе билдәләгеҙ:**

1)йылҡысы, ағаслыҡ
2)көрәш, ай
3)бөртөк - бөрсөк
4)БДУ

**А14.Теҙеү теркәүестәрен биләләгеҙ:**

1)сөнки, шуға күрә
2)шуның өсөн, әгәр
3)хатта, гүйә
4)әммә, йәнә

**А15. Ҡылымдың ҡайтым йүнәлеше менән бирелгән һөйләмде табығыҙ:**

1)Биҙәнеү - төҙәнеү өсөн дә оҫталыҡ кәрәк
2)Был хат бик күптән яҙылған булған
3)Һеңлем миңә бөтә йорт эшендә лә булыша
4)Мәктәптә көнөнә ике тапҡыр иҙән йыуыла

**А16.Бирелгән рәүештәрҙең яһалыу юлдарын билдәләгеҙ: ара -тирә, үрле - ҡырлы, көнө - төнө**

1)тамыр
2)яһалма
3)ҡушма (парлау)
4)ҡушма (бәйләү)

**А17. Һанды табып, төркөмсәһен билдәләгеҙ: Йөҙҙәрсә күҙ уның ауыҙына ҡараны.**

1)йыйыу
2)сама
3)төп
4)бүлем

**A18.Һөйләмдән рәүеш дәрәжәләрен билдәләгеҙ: Ирек үҙен беренсе тапҡыр йәл(1), яңғыҙаҡ итеп(2) һиҙҙе, һәм был тойғо уға бик тә ауыр(3) ине.**

1)төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ

2)аҙһытыу, сағыштырыу, төп

3)артыҡлыҡ, төп, аҙһытыу

4)төп, сағыштырыу, аҙһытыу

**A19. Алмаштарҙың төркөмсәләрен билдәләгеҙ: Был (1) ваҡиғанан һуң беҙҙең(2) тормош кәртәләнде: миңә(3) гәзит һатырға рөхсәт итмәнеләр.**

1)күрһәтеү, эйәлек, зат

2)билдәһеҙлек, һорау, юҡлыҡ

3)күрһәтеү, зат, билдәләү

4)һорау, эйәлек, зат

**A20. Исем ҡылым менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**

1)Һалды ҡаршыларға кешеләр билдәләнә

2)Олатайым һөйләгән ваҡиғалар, мәктәп альбомына теркәлгән

3)Өй эсендә шау - шыу, илау, шатланыу башланды

4)Шулар минең күңелдә ауырлыҡ тыуҙырҙылар

**A21. Төбәү килеште талап иткән бәйләүесте билдәләгеҙ:**

1)Бөйөк Ватан һуғышы тураһында фильм төшөрҙөләр

2)Олатайым һөйләүенә ҡарағанда,уларға Еңеү көнөн бик һуң ғына еткерәләр

3) Ҡалаға килгәндән бирле мин үҙемә тынғы тапмайым
4)Талҡаҫ күле көҙгө кеүек ялтырап ята

**A22.Мөнәсәбәт һүҙ менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**
1)Һәр башҡорт телен,мәҙәниәтен һәм шәжәрәһен яҡшы белергә тейеш
2)Дөрөҫөн һөйләп бирҙем дә баһа
3)Аһ,ҡотто алдың бит
4)Селтер-селтер аҡҡан шишмә һағышты баҫҡандай булды

**A23.Һөйләм аҙағында ниндәй тыныш билдәһе ҡуйыла?**
Ҡайҙа ғына ҡарама - сәтләүек һарғайып күренә
1)нөктә 3)өндәү
2)һорау 4)күп нөктә

**A24.Бер составлы һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.**
Февраль айының ҡаты бурандары.
1)билдәле эйәле 3)дөйөм эйәле
2)эйәһеҙ 4)атама

**A25.Кире хәлдәр менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**
1)Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған эстафета тапшырҙыҡ
2)Иртәнге ҡояш сағыу нурҙарын һибә
3)Ни тиклем генә тырышһам да,еңеү яулай алманым
4)Республикабыҙ киләсәге өмөтлө

**A26.Ҡушма һөйләм төрөн билдәләгеҙ:**
**Быйылғы йыл Республика йылы тип иғлан ителде, мәктәптәрҙә төрлө саралар үткәрелә башланы.**

1)эйәртеүле 3)теркәүесһеҙ теҙмә
2)теркәүесле теҙмә 4)күп эйәрсәнле

**A27.Кешеләрҙең төрлө дәүләт учреждениелары менән үҙ - ара аралашыуы ҡайһы стилгә ҡарай ?**

1)матур әҙәбиәт 3)хаттар
2)йәнле һөйләү 4)рәсми

**A28. Һөйләмдең хәбәре ниндәй һүҙ төркөмөнән килеүен һәм ниндәй ялғау ҡабул итеүен билдәләгеҙ:**
**Ер шары - минең йәшел йәшәү бишегем, һулар һауам,эсәр һыуым.**

1)исем, эйәлек заты 3)сифат, эйәлек килеш
2)ҡылым, хәбәрлек 4)рәүеш, хәбәрлек заты

**A29.Инеш һөйләмдәрҙә ниндәй тыныш билдәләре ҡуйыла?**

1)һыҙыҡ, йәйә 3)тырнаҡ, күп нөктә
2)йәйә, өндәү 4)ике нөктә, өтөр

**A30. Һөйләмдә ниндәй тыныш билдәләре төшөп ҡалған?**
**Минең бурысым ( ) туған халҡымдың өмөттәрен аҡлау ( ) унын намыҫлы эшсән улы булыу.**

1)ике нөктә, өтөр, һыҙыҡ 3)өтөр, нөктәле өтөр
2)һыҙыҡ, өтөр 4)нөктәле өтөр, һыҙыҡ

**А31.Ҡайһы һүҙгә килеш ялғауы дөрөҫ ҡушылған?**

1)Минскийҙан 3)Вәлишиндан

2)Донбассҡа 4)кафелә

**2-се өлөш**

**В1-В8 эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлы яуаптар бланкаһындағы шаҡмаҡҡа ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.**

**Тексты уҡығыҙ һәм В1-В7; С1 эштәрен башҡарығыҙ.**

(1)Ошо мәл минең күңелемдә мәңге онотолмаҫлыҡ булып уйылып ҡалды. (2)Ошонан һуң мин икмәктең — был бөйөк һәм изге нәмәнең - ҡәҙерен аңлағандай булдым.
(3)Икмәк - кешенең аҙығы ғына түгел, ә , ғорурлығы, бөйөклөгө, байлығы ул.(4) Икмәк — кешене кеше иткән, уға тәбиғәт алдындағы көсөн, аҡылын байраҡ иткән нәмә ул. (5)Икмәк — тормош ул.(6) Бына мин нәмәгә төшөнгәндәй булдым. (7)Ә беҙ бит уны асыҡҡанда ғына иҫкә төшөрәбеҙ, ҡәҙерләй белмәйбеҙ, иҫ киткес ғәмһеҙлек күрһәтәбеҙ. (8)Әлеге бер пилотка бойҙай ваҡиғаһынан һуң мин, аяҡтар юҫыҡ йөрөргә эшкинмәһә лә, Әфҡәт менән Әхәтте генә түгел (ул малайҙар ошо Әхәт менән Әфҡәт булып сыҡты), бөтә ауылды, бөтә тирә - яҡ кешеләрен, бөтә донъяны туйҙырырҙай булып эшкә егелдем. (9)Ауылдаштарым мине бригадир итеп ҡуйҙылар. (10)Бригадирҙың хәле билдәле бит инде: өй беренсә йөрөйһөң. (11) Кем нисек йәшәй, ҡалай тын ала, кемдә ниндәй шатлыҡ бар ҙа, кем ниндәй ҡайғыға тарыған. (12)Һуғыштың иң ҡыҙыу саҡтары. (13)Ауыр хәбәрҙәр йыш килә.
(14)Бындай саҡта, уртыңды сәйнәй - сәйнәй, тол ҡалған ҡатынға йылы һүҙ әйтәһең, етем балаларының башынан һыйпайһың.

(Ә.Вәхитов)

**В1.Текстан инеш һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**В2.Бер составлы һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**В3.Бирелгән һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәрен билдәләгеҙ:**

| № | Һүҙбәйләнеш | Хәреф | Һүҙбәйләнеш төрө |
|---|---|---|---|
| 1 | Ҡайғыға тарыған | А | Һөйкәлеү |
| 2 | Бригадирҙың хәле | Б | Ярашыу |
| 3 | Бер пилотка бойҙай | В | Башҡарылыу |
| 4 | Кем йәшәй | Г | Йәнәшәлек |

**В4. Текстан схемаға тап килгән һөйләмде билдәләгеҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.**

( ~~~~~ —— ~~~~ ------- —·—·—·– =.)

**В5.Текстан элизия күренешенә миҫал табып,яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**В6. В7,В11-се һөйләмдәрҙән киҫәксәләрҙе табып, төрөн билдәләгеҙ.**

**В7.Синонимдар булған һөйләмдәрҙе табып, яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**В8.Һүҙьяһалыш юлдарын билдәләгеҙ.Яуапты һан һәм хәрефтәр менән яҙығыҙ.**

| № | Һүҙ һәм һүҙбәйләнеш | Хәреф | Һүҙьяһалыш юлы |
|---|---|---|---|
| 1 | Әфҡәт менән Әхәт | А | Парлау |
| 2 | Сәйнәй - сәйнәй | Б | Ҡушыу |
| 3 | Тирә - яҡ | В | Бәйләү |
| 4 | Түрбаш | Г | Ҡабатлау |

**3-сө өлөш**

**С1 (инша) эшен башҡарғанда 2-се һанлы яуаптар бланкыһында үтәргә кәрәк.**

**С1.** Тексты уҡып сыҡҡандан һуң, текст буйынса инша яҙығыҙ. Автор тарафынан күтәрелгән проблемаға аңлатма бирегеҙ.

Автор ҡарашына аңлатма бирегеҙ. Уның ҡарашы менән килешеүегеҙ, килешмәүегеҙҙе яҙығыҙ. Ни өсөн? Үҙ яуабығыҙҙы тормоштан алған тәжрибә менән дәлилләгеҙ.

Инша күләме 150 һүҙҙән кәм булмаһын.

Уҡылған тексҡа нигеҙләнмәйенсә яҙылған эш баһаланмай.

Әгәр инша тәҡдим ителгән тексты һөйләп биреүгә ҡоролһа, йә текст аңлатма бирелмәй генә күсереп яҙылһа, ундай эш ноль балл менән баһалана.

Иншаны таҙа, аңлайышлы почерк менән яҙығыҙ.

## Башҡорт теленән берҙәм дәүләт имтиханы

## 02 – се вариант

Һорауҙарға яуап бирер алдынан инструкцияны иғтибар менән уҡып сығығыҙ.

Башҡорт теленән имтихан 40 һорауҙан тора, 1-се өлөштә (А) 31 һорау бирелә. Һәр һорауға 4 төрлө яуап килтерелә. Шуларҙың береһе генә дөрөҫ.

2-се өлөштә (В)8 һорау бирелә. Уларға ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.

3-сө өлөштә бер задание бирелә - йөкмәткеһе буйынса ҙур булмаған инша яҙырға ҡушыла. Инша махсус бланкта яҙыла.

Яуаптарҙы асыҡ, матур яҙығыҙ. Имтихан һорауҙарына яуап биреү өсөн 3 сәғәт (180мин.) ваҡыт бирелә. Эштәрҙе бирелеү тәртибендә үтәргә кәрәк. Ваҡытты экономиялау өсөн яуап бирә алмаҫтай һорауҙы ҡалдырып тороғоҙ һәм икенсе һорауға күсегеҙ. Бөтә 40 һорауға ла яуап биргәс, был һорауҙарға кире урап килергә мөмкин. Ваҡытты дөрөҫ бүлергә кәрәк: А – 31 – 45 минут, В – 8 – 45 минут, С – 90 минут.

Дөрөҫ яуап ҡатмарлылығына ҡарап бер йәки бер нисә балл менән баһалана. Бөтә эштәр өсөн ҡуйылған балдар ҡушыла. Күберәк һорауҙарға яуап биреп, күберәк балл йыйырға тырышығыҙ.

Һеҙгә уңыштар теләйбеҙ!

**1- се өлөш**

**А1 – 31** эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлы яуаптар бланкыһында шаҡмаҡҡа һеҙ һайлап алған яуапҡа тап килгән һан эргәһенә «х» тамғаһы ҡуйығыҙ.

**А1.Ҡайһы һүҙгә эйәлек ялғауы ҡушҡанда тамырҙағы һуҙынҡы һаҡланып ҡала?**

1)майҙан 3)колхоз

2)толом 4)көтөү

**А2.Исем ҡылымдарҙың ҡайһыһына ялғау дөрөҫ ҡушылған?**

1)бороуо 3)төшөүе

2)төрөүө 4)килүе

**A3.Ҡайһы рәттәге һүҙҙәрҙең уҡылышы дөрөҫ?**

1)Сәрби, Фәтхи, Нәбей

2)Шәмсей, Зәки, Ғилмей

3)Сәреби, Фәтехи, Бибей

4)Сәрбей, Фәтхей, Нәбей

**A4.Тартынҡылары дөрөҫ әйтелгән рәтте билдәләгеҙ:**

1)һикһәм бер, бер геше

2)боронғо, ҡомбағыш

3)ҡоро ғайын, Ватан

4)барып ал, пассив

**A5.Тамыр йәки нигеҙ ҡылымға -һа, -һә ялғауҙары ҡушылып яһалған ҡылым ҡайһы һөйкәлешкә ҡарай?**

1)теләк 3)бойороҡ

2)шарт 4)хәбәр

**A6.Төбәү килеште талап итеүсе бәйләүестәрҙе билдәләгеҙ:**

1)тиклем, табан 3)өсөн, тураһында

2)алып, башҡа 4)һымаҡ, менән

**A7.Теҙеү теркәүестәре менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**

1)Мин шул тиклем асыҡтым, шуға ла быуындарым ҡалтырай башланы
2)Дәрестән һуңлабыраҡ сыҡтым, шул арҡала трамвайға өлгөрмәнем
3)Көндәр буйы китапханала ултыра ла һуңлап ҡына ҡайтырға сыға
4)Әгәр бөгөн уңышлы сығыш яһаһам, һис шикһеҙ шат булыр инем.

**A8.Ҡылымдың эш - хәрәкәткә кәмһетеп ҡарау рәүешлеген белдергән һөйләмде билдәләгеҙ:**
1)Марат бөгөн сәсен ҡырын тараған булған
2)Уның бөгөн осрашыуға килмәүе лә ихтимал
3)Рәсүл шатлығынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе
4)Һаман күҙ алдымдан китмәйһең, Ғәҙел!

**A9.Предметтың йәки кешенең эше буйынса билдәһен белдереүсе ҡылымдар нисек атала?**
1)хәл ҡылым 3)сифат ҡылым
2)исем ҡылым 4)уртаҡ ҡылым

**A10.Ҡайһы ҡылым төркөмсәһе затта ла, һанда ла үҙгәрмәй?**
1)исем ҡылым 3)хәл ҡылым
2)уртаҡ ҡылым 4)сифат ҡылым

**A11.Форзац һүҙенең мәғәнәһен ҡайһы һөйләм асыҡлай?**
1)Яңы юл,абзац
2)Телмәр һөйләүсе кеше
3)Ҡағыҙҙағы яҙыуҙарҙы икенсе ҡаҙғыҙға күсереүсе аппарат
4)Китапты уның тышы менән тоташтырыусы эске яҡлап ҡуйылған бите

**А12.Һандарҙы табып,төркөмсәһен билдәләгеҙ:**

Төрки телдәр егерме бишләп булһа,ҡалған ике төркөмдә бишәр – алтышар ғына тел иҫәпләнә.

1)йыйыу, сама, бүлем

2)төп, бүлем, кәсер

3)рәт, төп, үлсәү

4)сама, төп, бүлем

**А13.Билдәһеҙлек алмаштарын билдәләгеҙ:**

1)һис ниндәй,һәр бер 3)һәр кем, бөтәһе

2)әллә нисек,ҡайһы 4)бер ни, һәммәһе

**А14.Ҡайһы рәттә тарихи һүҙҙәр бирелгән?**

1)мөғәллим, мөҡәддәс 3)иҡтисад, сәйәсмән

2)барымта, кулак 4)принтер, факс

**А15.Ауыҙ һыуы ҡороу тигән фразеологик берәмектең мәғәнәһен билдәләгеҙ.**

1)бик ныҡ маҡтау 3)күп уҡыу

2)әрләү 4)арығансы йүгереү

**А16.Тиң булмаған аныҡлаусы менән бирелгән һөйләмде билдәләгеҙ:**

1)Ауылымдың бейек – бейек тауҙарына ҡарап һоҡланам

2)Аҡ,зәңгәр,һары төҫтәрҙе үҙ итәм

3)Теҙелеп үҫкән зифа аҡ ҡайындарҙы юҡһынам

4)Көнсығыштан йылы,талғын ел иҫә.

**A17.Өҫтәлмәлектәре булған һөйләмде билдәләгеҙ:** 1)Минең ағайым хирург булып эшләй
2)Сөмбөл уҡытыусы һөнәрен үҙләштерә
3)Зөләйха өләсәйем беҙгә йыш килә.
4)Район мәктәптәрендә физиктар бик аҙ

**A18.Һөйләмдән инеш һүҙҙе табып, мәғәнәһен билдәләгеҙ:**
Ниһайәт,барыһы ла беҙ уйлағанса килеп сыҡты.     1)фекер йомғағы     3)ышаныу
2)фекер тәртибе     4)шикләнеү

**A19.Ҡушма һөйләм төрөн билдәләгеҙ:**
**Әллә өләсәһе һөйләгәнеме,әллә кемдәндер ишеткәнеме бар Юлдаштың: кәмә сайҡалмаһын өсөн, тигеҙлек һаҡларға кәрәк.**
1)күп эйәрсәнле     3)ҡатнаш ҡушма
2)теҙемдәр     4)эйәртеүле

**A20.Башҡорт алфавиты нисә хәрефтән тора?**
1)38     3)41
2)40     4)42

**A21.Яңғырау тартынҡыларҙан төҙөлгән рәтте билдәләгеҙ:**
1)заман,борғо,баян     3)йөҙөм,хат,һауыт
2)мәктәп,дәфтәр,ҡәләм     4)боҙ,ямғыр,таж

**A22.Билдәһеҙ эйәле һөйләмдең хәбәре нисәнсе затта килә?**

1)1-се зат 3)3-сө зат

2)2-се зат 4)1-се һәм 2-се зат

**A23.Сәйәсәт, идеология, мәҙәниәт, ижтимағи - сәйәси тормош өлкәһендә аралашыу ниндәй стилгә ҡарай?**

1)фәнни 3)рәсми

2)публицистик 4)йәнле һөйләү

**A24.Нөктәле өтөр ҡайһы осраҡта ҡуйыла?**

1)инеш һөйләмдә 3)теҙмә ҡушма һөйләмдә 2)ябай һөйләмдә 4)ымлыҡтан һуң

**A25.Һөйкәлеү бәйләнешен билдәләгеҙ:**

1)минең йондоҙом 3)аҫыл ҡош

2)дәфтәргә яҙҙым 4)ямғыр яуа

**A26.Һөйләмдән сифатты табып,дәрәжәһен билдәләгеҙ:**

Һылыуҙарҙың - һылыуы бит минең әсәкәйгенәм! 1)аҙһытыу 3)сағыштырыу

2)артыҡлыҡ 4)төп

**A27.Ҡушма ҡылымды табып,яһалыу юлын билдәләгеҙ:**

Урал әбейе өмәселәргә йәш саҡтағы мәҙәктәрен көлә- көлә һөйләй торғайны.

1)парлау 3)бәйләү

2)ҡабатлау 4)парлау,бәйләү

**<u>А28.Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымын табып,мәғәнәһен аңлатығыҙ:</u>**

Зинһар, әйтегеҙ инде, ышанысымды бер үк аҡлаһындар!

1)үтенес 3)рәсми бойороу

2)ҡаты бойороу 4)ғәҙәти бойороу

**<u>А29.Ауылдаштарым һүҙе ниндәй ялғауҙар ҡабул иткән,ҡайһы схема тура килә?</u>**

1)яһаусы, яһаусы, килеш

2)яһаусы, үҙгәртеүсе, эйәлек заты ялғауы

3)килеш, яһаусы, яһаусы

4)үҙгәртеүсе, үҙгәртеүсе, хәбәрлек заты ялғауы

**<u>А30.Һөйләмдә ниндәй тыныш билдәһе ҡуйылмаған?</u>**

**<u>Ат тураһында һөйләй башланыңмы( )малайҙарҙан ҡотолоп булмай.</u>**

1)өтөр 3)һыҙыҡ

2)ике нөктә 4)нөктәле өтөр

**<u>А31. «Теге» алмашының төбәү килеш формаһын билдәләгеҙ:</u>**

1)тегене 3)тегендә

2)тегегә 4)тегелә

**2-се өлөш**

**В1-В8 эштәрҙе башҡарғанда 1-се һанлы яуаптар бланкаһындағы шаҡмаҡҡа ҡыҫҡаса яуапты һандар һәм хәрефтәр тәртибендә бирергә кәрәк.**

**Тексты уҡығыҙ һәм В1-В7; С1 эштәрен башҡарығыҙ**.

(1) …Иллеләп һуғышсынан торған төркөмдө тар-мар итергә ебәрелгән десантниктар взводы үҙе ҡамауға эләкте. (2) Ике БМП-ның береһе дөрләп яна, икенсеһе ҡайҙалыр тороп ҡалды.

(3)Күҙ бәйләнгән мәл ине. (4) Тәпәш кенә сәнскеле ҡыуаҡ, артыш та әрем баҫҡан соҡор - саҡырлы ер. (5) Яҡында ғына һайығып, тармаҡ - тармаҡ бүленеп аҡҡан ҙур һыу. (6) Шуны аша сыҡһа, взвод тоҙаҡтан ысҡына - ысҡыныуын, ләкин уға яҡын барырлыҡ түгел. (7) Теге төркөм патронды йәлләмәй. (8) Пулеметтар, автоматтар туҡтауһыҙ шатырлатып ата.

(9)Ошо ваҡыт десантниктарға ярҙамға килеп еткән минометсылар ут асты. (10) Ҡараңғыла улар кемдең ҡайҙалығын абайламаны, ахырыһы. (11) Бер нисә мина үҙебеҙҙең һалдаттар ятҡан ергә килеп төшмәһенме. (12) Хәйер, ҡаршы яҡта ла аллы - артлы гөрһөлдәү тауыштары яңғыраны, һауаға утлы бағаналар сорғолдо. (13) Ошонан файҙаланып, десантниктар йылғаға ташланды.

(14)Взвод йылға аръяғына сигенеп, үлемесле ерҙән алыҫлашҡан һайын, атыш тауыштары, гранаталар гөрһөлдәүе шул тарафҡа күсә барҙы. (15) Үлгән һалдаттарҙың мәйеттәре лә, яраланып йығылғандар ҙа бәрелеш урынында ятып ҡалды. (16)Шулар иҫәбендә йәш кенә сержант, йәнфарман йүгергән ыңғайға күкрәгенә пуля тейеп, мина соҡорона ҡоланы.

(Ә.Хәкимов)

**<u>В1.Инеш һүҙле һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.</u>**

**<u>В2. В14 - се һөйләмдең төрөн билдәләгеҙ.</u>**

**В3.Бирелгән һөйләмдәрҙең төрҙәрен билдәләгеҙ. Яуапты һан һәм хәреф менән яҙығыҙ.**

| № | һөйләм | Хәреф | Һөйләм төрҙәре |
|---|---|---|---|
| 1 | Шулар иҫәбендә йәш кенә сержант, йәнфарман йүгергән ыңғайға күкрәгенә пуля тейеп, мина соҡорона ҡоланы. | А | Айырымланған хәл |
| 2 | Тәпәш кенә сәнскеле ҡыуаҡ, артыш та әрем баҫкан соҡор-саҡырлы ер. | Б | Теркәүесле теҙмә ҡушма |
| 3 | Шуны аша сыҡһа, взвод тоҙаҡтан ысҡына - ысҡыныуын, ләкин уға яҡын барырлыҡ түгел. | В | Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма |
| 4 | Ике БМП-ның береһе дөрләп яна, икенсеһе ҡайҙалыр тороп ҡалды. | Г | Атама |

**В4.Текстан ҡылымдың юҡлыҡ формаһын күрһәткән һөйләмде табып,яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**B5.Күрһәтеү алмаштары булған һөйләмде табып, килешен билдәләгеҙ. Яуапты һан һәм килештәр менән яҙығыҙ.**

**B6. B1, B11 – B13 -сө һөйләмдәрҙән ҡылымдарҙы табып,төркөмсәләрен билдәләгеҙ. Яуапты һан һәм һүҙ менән яҙығыҙ.**

**B7.Текстан тик нәҙек һуҙынҡынан һәм ҡалын һуҙынҡыларҙан ғына төҙөлгән һөйләмдәрҙе табығыҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.**

**B8.Текстан ҡушма һүҙҙәрҙе табып, яһалышы буйынса төркөмләгеҙ. Яуапты һан менән яҙығыҙ.**

| № | Ҡушма һүҙҙәрҙең яһалышы | Нисәнсе һөйләмдә бирелгән |
|---|---|---|
| 1 | Парлау | |
| 2 | Ҡабатлау | |
| 3 | Ҡушыу | |
| 4 | Ҡыҫҡартыу | |

**3-сө өлөш**

**C1 (инша) эшен башҡарғанда 2-се һанлы яуаптар бланкыһында үтәргә кәрәк.**

**С1.** Тексты уҡып сыҡҡандан һуң, текст буйынса инша яҙығыҙ. Автор тарафынан күтәрелгән проблемаға аңлатма бирегеҙ.

Автор ҡарашына аңлатма бирегеҙ. Уның ҡарашы менән килешеүегеҙ, килешмәүегеҙҙе яҙығыҙ. Ни өсөн? Үҙ яуабығыҙҙы тормоштан алған тәжрибә менән дәлилләгеҙ.

Инша күләме 150 һүҙҙән кәм булмаһын.

Уҡылған тексҡа нигеҙләнмәйенсә яҙылған эш баһаланмай.

Әгәр инша тәҡдим ителгән тексты һөйләп биреүгә ҡоролһа, йә текст аңлатма бирелмәй генә күсереп яҙылһа, ундай эш ноль балл менән баһалана.

Иншаны таҙа, аңлайышлы почерк менән яҙығыҙ.

1-се варианттың яуаптары

1-се өлөш

A1 –3
A2 – 4
A3 – 3
A4 – 1
A5 – 2
A6 – 3
A7 – 2
A8 – 4
A9 – 4
A10 – 3
A11 – 2
A12 – 3
A13 – 1
A14 – 4
A15 – 1
A16 – 3
A17 – 4
A18 - 2
A19 - 1
A20 - 3
A21 - 2
A22 - 1
A23 - 1
A24 - 4
A25 - 3
A26 -3
A27 - 4
A28 - 1
A29 - 1
A30 - 2
A31 - 2

2-се өлөш

В1 – 2,8
В2 -12,14
В3 – 1В, 2А, 3Г, 4Б
В4 – В1,
В5 – В8
В6 – Раçлау, сикләү, тиҙлек
В7 – В2, В3, В8, В11
В8 –1Б, 2В, 3Г, 4А

## 2-се варианттың яуаптары

### 1-се өлөш

| | |
|---|---|
| A1 – 2 | A17 – 4 |
| A2 – 3 | A18 - 2 |
| A3 – 4 | A19 - 3 |
| A4 – 1 | A20 - 4 |
| A5 – 2 | A21 - 1 |
| A6 – 1 | A22 - 3 |
| A7 – 3 | A23 - 2 |
| A8 – 1 | A24 - 3 |
| A9 – 3 | A25 - 1 |
| A10 – 2 | A26 - 2 |
| A11 – 4 | A27 - 2 |
| A12 – 4 | A28 - 1 |
| A13 – 2 | A29 - 2 |
| A14 – 2 | A30 - 3 |
| A15 – 1 | A31 - 2 |
| A16 – 3 | |

2-се өлөш

В1 – В10, В12
В2 –Тиң булмаған күп эйәрсәнле ҡушма һөйләм
В3 – 1А, 2Г, 3Б, 4В
В4 – В7, В10
В5 – В6 - төш. к., В7- төп к., В9-төп к., В13- сығ. к.,   В16- төп к.
В6 – В1-уртаҡ, В11-сифат, В12-исем, В13-хәл
В7 – В3, В13
В8 –1-В1,В4,В6,В12
2-В5
3-В16
4-В2